3 а класы уҡыусыһы
Карамова Рената

# Фразеологизмдар донъяһында

# Тикшеренеү эшенең маҡсаты:

- фразеологизмдар  тураһында тулыраҡ мәғлүмәт туплау;
- телмәрҙә йышыраҡ ҡулланылған фразеологизмдарҙы асыҡлау.

- М. Х. Әхтәмов билдәләүенсә «Фразеологик берәмек – берҙәм бөтөн мәғәнәгә эйә булған даими составлы әҙер тел берәмеге. Телдең лексик системаһында тел берәмеге булып һүҙ торһа, фразеологик системала ундай берәмек булып фразеологизм, йәғни фразеологик берәмек, һанала».

# Фразеологик берәмек һәм мәҡәлдең айырмалыҡтары:

| | |
|---|---|
| Фразеологик берәмек төшөнсә аңлата. (Күҙе маңлайға менгән) | Мәҡәлдәр ҡатмарлы уй-фекерҙе белдерәләр.(Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ) |
| Ҡайһы бер фразеологик берәмектәр ысынбарлыҡ күренештәрҙе атай һәм кәүҙәләндерә (***типһә тимер өҙөрҙәй-көслө***). | Мәҡәлдәрҙә тормош-көнкүреш, ысынбарлыҡ хаҡында фекер йөрөтөү сағылдырыла. |
| Фразеологик берәмектәр башлыса һүҙбәйләнеш формаһында булалар. | Мәҡәл, әйтемдәр һәр ваҡыт һөйләм формаһында килә. |

## Түбәндәге һорауҙар тәҡдим ителде:

- Фразеологизмдың нимә икәнен беләһегеҙме?
- Фразеологизмдарҙы телмәреңдә йыш ҡулланаһыңмы?
- Ниндәй фразеологизмдар беләһең?



# Йондоҙ hанау



# Йондоҙ һанау



Эшһеҙ йөрөү, ваҡытты бушҡа уҙғарыу



# Мөгөҙҙө һындырыу



# Мөгөҙҙө һындырыу



Нығ шашҡан кешегә ҡаршылыҡ күрһәтеп, кәрәген биреү



# Күҙе аҡайған



# Күҙе аҡайған



**Бер нәмәгә иҫе китеп ныҡ мауығып, бүтән нәмәне онотҡан кешегә әйтелә**



# Тәгәрмәскә таяҡ тығыу



# Тәгәрмәскә таяҡ тығыу



# Ҡамасаулау, эште тотҡарлау



# Тауыҡ тәпәйе менән яҙған кеүек



# Тауыҡ тәпәйе менән яҙған кеүек



Йәмһеҙ, бысраҡ яҙыу



# Танауға еҫ инеү



# Танауға еҫ инеү



**Донъяның серҙәрен һиҙә, аңлай башлау**



# Ең һыҙғаныу



# Ең һыҙғаныу



**Эшкә әҙер булыу, ҙур тырышлыҡ менән эшләү**



# Сысҡан күҙе кеүек



# Сысҡан күҙе кеүек



**Бик бәләкәй булып, саҡ-саҡ күренгән ут, яҡтылыҡ**



# Юлыңда бул, юлыңа аҡ йәймә



# Юлыңда бул, юлыңа аҡ йәймә



Кәрәкһеҙгә килеп ҡыҫылған кешене эргәнән ҡыуыу



# Ашарҙай булып ҡарау



# Ашарҙай булып ҡарау



Асыу менән ҡарау



# Эҙ йәшереү



# Эҙ йәшереү



Таптырмаҫ, тоттормаҫ өсөн юлды бутау



# Сәсрәп китмәйме (китмәгәйе)



# Сәсрәп китмәйме (китмәгәйе)



**Нимәгәлер ризаһыҙлыҡ, асыу белдергәндә әйтелә**



# Биткә ҡыҙыллыҡ килтереү



# Битҡә ҡыҙыллыҡ килтереү



**Оятлыҡ килтерерлек эш ҡылыу, оятҡа ҡалдырыу**



# Ҡыл сонда йөрөү



# Ҡыл сонда йөрөү



**Һәләк булыуҙан саҡ-саҡ ҡына ҡалып, бик ҡурҡыныс хәлдә булыу**

# Һығымта:

- Уҡыусыларҙың фразеологик төшөнсәһен аңлау-аңламауы асыҡланды. Бөтә уҡыусылар ҙа ыңғай яуап бирҙеләр. Тимәк, был төшөнсә уларға таныш.
- Уҡыусыларҙың фразеологизмдарҙы телмәрендә ҡулланыуы асыҡланды. Һөҙөмтәләргә таянып, түбәндәге һығымта барлыҡҡа килә: 3А, 3Б класы уҡыусылары телмәрендә фразеологизмдарҙы йыш ҡулланалар.
- Уҡыусыларҙың телмәрендә ниндәй фразеологизмдар ҡулланыуы асыҡланды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уҡыусылар үҙ телмәрендә фразеологизмдарҙы рус телендә генә ҡулланалар.